*Таңсулпан ҒАРИПОВА*

# ТЕАТРҘЫҢ АЛТЫН БАҒАНАҺЫ

Рәмилә Хоҙайғолова... Был исем танһыҡ та, тылсымлы ла моң, тетрәнергә, һиҫкәнергә мәжбүр иткән бер мөғжизә булып, тормошома ҡапыл, Сыңғыҙ Айтматовтың «Ҡыҙыл яулыҡлы тирәкәйем» пьесаһы буйынса Сибай театры ҡуйған спектакль аша килеп инде. Баймаҡ районының Түбә ҡасабаһында унынсы синыфта уҡып йөрөй инем ул саҡта. Күңелдең әле Ромео менән Джульеттаны күккә күтәргән һәм шул уҡ ҡөҙрәт менән гүргә этәргән мөхәббәткә ышанған сағы. Йәш кенә, һылыу, һомғол, толомдары теҙенә төшөп торған Рәмилә тыуҙырған образ — Аҫыл-ана шул йөрәк түрендә йәшәгән хистәрҙең тере һыны булып күҙ алдына баҫты. Әммә ынйылай саф тойғолар, ҡояшҡа тәүләп күҙен асҡан рауза таждары мәкерле Хәҙисә ҡорған тоҙаҡтың элмәгенә ҡапты. Аҫыл мөхәббәтенең емеше улын, ҡанаты көйгән, ләкин көл-күмергә әйләнмәйсә тере ҡалған һөйөүен күкрәгенә йомоп, үҙен бәхетһеҙ яһаған төбәктән ҡасырға, яҙмыш-тәҡдиргә буйһоноп, икенсе берәүҙең яралы күңеленә ямау булып йәшәргә мәжбүр булды... Эй һыҡтаным, эй иланым шунда, сәхнә менән тормош араһындағы кәртә ҡоланы. Тик шул кәртәне алып ташлаусы бөйөк көстөң сәнғәт тип аталғанын һәм героиняны уйнаусы Хоҙайғолованың бөйөк талант эйәһе икәнен генә төшөнмәгәнмен.



Әммә мин быға һуңғараҡ төшөндөм. Рәмилә Хоҙайғолова ҡатнашлығында үткән һәр спектакль төшөндөрә барҙы быны. Улай ғына түгел, Рәмилә Хоҙайғолова, хоҙайҙың ҡушыуы, үҙемдең әҫәрҙәр буйынса ҡуйылған спектаклдәрҙә лә уйнаны. Уйнап ҡына түгел, «Төштәге йыр»ҙағы Гөлзада, «Бәхеткә ҡасҡандар»ҙағы Мөғлифә, артистканың әйтеүенсә, иң яратып уйнаған образдарына әүерелде.

Тормошта осраҡлы хәлдәр булмай, тигәндәре дөрөҫтөр. Бына миңә Дәүләкән районының бер генә ауылында булырға тура килде. Ул да булһа, Рәмилә Хоҙайғолованың тыуған ауылы Дүртөйлө булып сыҡты. Тормошта һирәк осрай торған талант эйәһенең тыуған ере икәнен белгәс, ҡар ҡаплаған туғай-ҡырҙарға айырым бер ҡыҙыҡһыныу менән баҡтым. Ҡырҙары — ҡәҙимге ҡыр, тауҙары ла әллә ҡайҙа китмәгән, ауылы ла мин күргән ауылдарҙан әллә нимәһе менән айырылып тормай. «Ғәжәп, — тип уйланым эсемдән. — Әллә талант эйәләрен ер түгел, күк тыуҙыра микән?!» Ул саҡтағы һорауыма мин әле лә яуап таба алғаным юҡ, мәгәр ҡырҡ йылға яҡын ғүмер Сибай театрының умыртҡа һөйәген тәшкил иткән артистканың ата-әсәһе, уның бала сағы тураһында апаруҡ ҡына мәғлүмәт йыйҙым.

Колхоз тимерсеһе, балта оҫтаһы (үҙенә күрә ижадсы!) ғаиләһендә тыуа ул. Атаһы Ниғмәтйән ауылында ғына түгел, бәлки тирә-яҡта билдәле йырсы була. Мәжлестәрҙә ул йыры, ул сәсәнлеге, мәрәкәселлеге менән бар халыҡты ауыҙына ҡаратып ултыртып ҡуйыр булған. Уҡыу эләкһә, Ниғмәтйән, һис шикһеҙ, йә йырсы, йә артист булыр ине лә бит, ләкин ул заманда һәләтеңә юл асыу хаҡында уйлап та булмағандыр.

Кешенең йәне ҡайтанан донъяға тыуыр булһа, буласаҡ атаинәһен үҙе һайлай, ти бит. Рәмиләнең дә йәне был парҙы юҡҡа һайламағандыр: ул кесе йәшенән атаһының йыр-моңон тыңлап, күкрәгенә һеңдереп үҫә. Эсенән генә апаруҡ оҙон көйҙәрҙе мөңрәштереп тә ала—йәбе килеп сыҡҡандай тойола. Моңло күңелгә йыр килмәйме? Тора-бара Рәмилә сәхнәгә лә сыға. Сәхнәлә йырлау менән генә сикләнмәй, шиғыр ҙа һөйләй. Икенсе класта уҡығанында ул нисек беренсе тапҡыр сәхнәгә күтәрелһә, шунан бирле сәхнәнән төшмәй! Ярты быуат буйы Рәмилә Хоҙайғолованың таланты халыҡты берсә иларға, берсә көлөргә мәжбүр итә. Уның сығышына битараф тамашасы юҡ.

Нисектер бер Рәмилә апай менән ҡунаҡханала һөйләшеп ултырҙыҡ. Шунда ул миңә: « Тәүге спектаклдәремде мин ауылда, мәктәптә уҡығанда башланым. Һуғыштан һуңғы ҡатмарлы осор. Күп инәй-апайҙарҙың ирҙәре, улдары һуғыштан ҡайтманы. Тол ҡатындар кистәрен берәйһенә йыйылалар ҙа мине эргәләренә саҡыралар. Ҡышҡы оҙон төндәр шаршауы аҫтында күпме йыр йырланды, күпме шиғыр һөйләнде!» — тине. Был да, күрәһең, Рәмилә Хоҙайғолова өсөн ижад мәктәбе булғандыр. Оҫталыҡ мәктәбе. Юғиһә, һәр өнөңдө, шыбырлап ҡына әйткән һүҙеңде тамашасыға ишеттереү оҫталығына сәнғәт училищеһында дүрт йыл уҡып ҡына өйрәнеп булмайҙыр ул...

Сәхнә кешеһе өсөн, бигерәк тә артистка өсөн, буй-һын, төҫ-килбәт айырыуса мөһимдер. Был йәһәттән дә Хоҙай уға йәлләмәй биргән: янып торған ҡап-ҡара күҙҙәр, эҫкәк эҙе күрмәгән ҡыйылып киткән ҡаштар, килешле ирендәр, тура танау, классик өлгө дәрәжәһендә нескә йөҙ. Әлбиттә, бындай тышҡы ҡиәфәт менән теләһәң Шекспир, теләһәң Чехов пьесалары геройҙарын уйнап була. Әммә уға Хоҙай ҫәләп биргән талант булмаһа, инде ҡырҡ йылға яҡын гел төп геройҙарҙы уйнап йөрөй алмаҫ ине ул. Ошо хаҡта уйлаһаң, артист өсөн иң мөһиме форма түгел, эстәлек килеп сыға бит әле. Ошо эстәлектең Хоҙайғоловала көслө булыуы арҡаһында, төп булмаған геройҙы уйнаһа ла тамашасының хәтерендә ҡала ул. Ана лаһаң, «Ай тотолған төндө»лә Шәфәҡ героиня түгел, ләкин уны Рәмилә Хоҙайғолова уйнағас, тамашасы хәтерендә әлегәсә Рәмилә-Шәфәҡ йәшәй.



*«Өлдә төнөн йондоҙ бар»*
*Һәҙиә Дәүләтшина — Р.Хоҙайғолова,*
*Ғөбәй Дәүләтшин — Р.Яныбаев*

Ғүмер буйы күсмә (бөгөнгө көндә күсмә тормош менән йәшәгән берҙәнбер «ҡәбилә» — артистар, буғай) хәлдә йәшәү кешенең булмышына-холҡона һеңешә, холҡона үҙенә хас һыҙаттар өҫтәй кеүек. Рәмилә Хоҙайғоловаға ҡараһаң, бер ниндәй ҙә сәйерлек тоймайһың, һәр саҡ баҫалҡы, тыныс. Кем менәндер һүҙ көрәштергәнен, бәхәсләшкәнен дә күргәнем юҡ. Һәр саҡ тыныс, үҙе иҫ киткес ябай. Сәхнәлә ике йөҙләп төп роль уйнаған Башҡортостандың халыҡ артисткаһы исемен яулаған оҫта маһайыуы ла юҡ. Театрға килгән йәш ҡатын-ҡыҙ үҙенә ылығып бара, ә ул һәр береһенә йылы һүҙ таба, дәртләндерә, рухтары имгәнеүҙән, ҡанаттары ҡайырылыуҙан һаҡлай. Әйткәндәй, мәктәпте тамамлау менән театрға музыкант булып эшкә урынлашҡан Марсель Хоҙайғолов менән ғаилә ҡороуына ла байтаҡ ғүмер үтте. Был йылдар арауығында Марсель баянистан киң амплуалы артистҡа әүерелде. Рәмилә Хоҙайғолова кимәлендәге таланттың ире булыу Марселгә анһат та булмағандыр, бәлки. Әммә тормош юлынан улар икәү бергә ҡулға ҡул тотоношоп киләләр. Рәмилә Хоҙайғолованың әсәһенең донъя ҡуйыуына ла яңы бит әле.

Кейәү яҡшы булһа ғына ҡәйнәне һыйҙыра торғандыр, әммә Рәмиләне лә «Ҡәйнәһенең иң яратҡан килене», — тигәндәрен ишеткәнем бар. Анау хәтле образдар, яҙмыштар, характерҙар тыуҙырған артистка күңеле, күрәһең, тормошта ла иркендер, унда һыйыныу эҙләгән һәр йән эйәһе үҙенә урын таба торғандыр...

Артистка, ғөмүмән, ижад кешеһе тураһында яҙғанда башлыса унын ижад кухняһына туҡталыусан журналист. Үҙем артистка булмағас, Рәмилә Хоҙайғолованың теге йәки был роль өҫтөндә нисек эшләүен тасуир итә алмамдыр. Хатта мин үҙемдең «Төштәге йыр»ҙа ла (режиссер Д.Ғәлимов) көн дә тиерлек репетицияһында ултырһам да унын был ролде нисек килтереп сығарғанын аңғармай ҡалдым. Башҡа артистарҙың роль өҫтөндә нисек эшләүе хаҡында әллә күпме һөйләй алам. Ә бына Рәмилә Хоҙайғолова... Золушканың принцессаға әйләнгәнен бер кем дә шәйләмәй ҡалған кеүек, Рәмиләнең Гөлзадаға әүерелеүен дә абайламаным. Фонограмманан унын тауышы — Гөлзада йыры яңғырағас, аптырап ҡалдым: опера йырсыһы! Рәмилә Хоҙайғолова үҙе йырлай! Ошо саҡлы таланты була тороп, ул нисек үҙен йырсы сифатында һынап ҡарауҙан тыйылды икән!

Рәмилә Хоҙайғолова ижады тураһында уйлана китһәң, яуап таба алмаған һорауҙар күбәйгәндән күбәйә. Бына шул уҡ Гөлзада образы. Рәмилә Хоҙайғолова бөтә спектакль барышында икенсе ҡатта хәрәкәтһеҙ ултыра, ейәне менән «пароход уйнай». Әммә тамашасы күҙҙәрендәге йәште тап ошо образ һығып сығара! Ә Рәмилә Хоҙайғолова—Гөлзада тәүге һәм һуңғы тапҡыр хәрәкәткә килгәндә — аяҡҡа баҫҡанда — спектаклгә осраҡлы ингән һәм сентименталлек төшөнсәһенән бөтөнләй йыраҡ торған ир-егеттәрҙең дә күҙенән йәш һарҡа...

Артистка образ тәрәнлегенә өлгәшә алһын өсөн, партнерынан уңыуы ла бик мөһимдер. Унын уйнаған ролдәрен уҡып ултырам: Хәмзә Ҡурсаев, Мулланур Ниғмәтуллин, Хисмәтулла Дәүләтов, Риф Сәйфуллин — бөтәһе лә театр сәнғәтендә эре фигуралар. Сибай театрының һуңғы эшендә — минең «Бәхеткә ҡасҡандар»ҙа (режиссеры Сәлих Әфләтунов) Рәмилә Хоҙайғолованың партнеры — Башҡортостандың халыҡ артисы Мулланур Ниғмәтуллин. Икеһе лә халыҡтың теленә, тарихына һаҡсыл заттар, уҡымышлы-зыялы кешеләр, театр арыҫландары. Бер-береһен һүҙһеҙ аңлаған был ике таланттың гармонияһы мөхәббәттең бөйөк һәм сихри көсөнә һәр тамашасыны инандырҙы, күңелдәрҙе пакландырып, илаһи бейеклеккә күтәрҙе.

Комедия жанрында ла, трагедияла ла берҙәй уңышлы эшләгән актерҙы табыу еңел түгелдер. Рәмилә Хоҙайғолованың комедияла уйнауы ла үҙенсәлекле. Тупаҫ хәрәкәттәрҙән, икеле им-ишараларҙан алыҫ тора унын уйыны, әммә баҙыҡ. Баҙыҡ һәм юморлы. Н.Ғәйетбайҙың «Абау, кем ята унда?», Г. Юнысованың «Ике тауыҡ, бер әтәс»ендә, йәнә «Аты барҙың — дәрте бар»ҙа... Һанай китһәң, күп инде ул. «Башмағым»дағы бай ҡатыны үҙе ни тора!

Эйе, Рәмилә Хоҙайғолова тыуҙырған образдар шулай: илата ла, көлдөрә лә, йыуата ла, әрнетә лә. Сәнғәтте лә, әҙәбиәтте лә күккә күтәргән сифат — ул халыҡсанлыҡтыр. Халыҡсан ижад ҡына ғүмерле, ғүмерле ижад ҡына үтемле. Дәүләкән ерендә тыуып-үҫеп, Дим йылғаһында сәстәрен йыуған Рәмилә Хоҙайғолова Баймаҡ тупрағында — Сибай ҡалаһында тамыр ебәрҙе, ә олоно унын юғары. «Ҡыҙыл яулыҡлы тирәкәй»ҙән ул дәү имәнгә әүерелде, театрҙың йөҙөк ҡашына, унын алтын бағанаһына әйләнде.